***Тема***: Әнүр Вахитовтың «Ир ҡанаты» әҫәре буйынса йомғаҡлау дәресе.

***Маҡсат***: -әҫәрҙең төп темаһын асыу;

- аттарҙың файҙаһы, улар менән тупаҫ ҡыланырға ярамауын, һаҡлау кәрәклеген уҡыусыларға төшөндөрөү, йылҡы малына һөйөү тойғоһо тәрбиәләү;
- уҡыусыларҙың ижади һәләтен арттырыу.

***Йыһаз:*** дәреслек, ат һүрәте, «Һыбайлы башҡорт» картинаһы, Я.Хамматовтың «Төньяҡ амурҙары», Р.Өмөтбаевтың «Генерал Кусимов» китаптары, ат тоҡомдары төшөрөлгән һүрәттәр, магнитофон яҙмаһы – «Азамат», «Эйәрле ат», «Аҡбуҙат» йырҙары.

***Плакаттар:*** «Ат – башҡорттоң тоғро юлдашы», «Йылҡы – малдың батшаһы».

## *Дәрес барышы.*

I. Ойоштороу мәле.

Магнитофондан халыҡ йыры «Азамат»ты тыңлау.

- Уҡыусылар, йырҙың тәүге куплетында ат тураһында нимә әйтелә?
- Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй,
  Ир-егеткәй менән ат башы.
- Әйҙәгеҙ, ошо һүҙҙәрҙе девиз итеп алып дәфтәребеҙгә яҙып ҡуяйыҡ.

II. Өй эшен тикшереү.

Бер нисә уҡыусы өйҙә үҙҙәре яҙып килгән ат тураһындағы шиғырҙарын уҡыйҙар, һуңынан бөтәһе лә тапшыра.

III. Төп өлөш.

1. -Саптар, Ерән бейә, Ҡотлогилде, Мөхәмәтулла, шырмый, шепшә – был һүҙҙәр ниндәй әҫәрҙә осраны? (Ир ҡанаты).

- Ошо һүҙҙәргә бәйле ниндәй ваҡиғалар беләһегеҙ икән, быны беҙ һорауҙарға яуаптар биреп асыҡларбыҙ.
- <u>Мөхәмәтулла бабай</u>. Ул ғүмер буйы нимә менән шөғөлләнә?
- Ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер, тип нимә хаҡында әйтә?
- Әҫәрҙә һүҙ көсө тураһында нимә әйтелә?
- <u>Саптар, Ерән бейә.</u> Ни өсөн Мөхәмәтулла бабай Ерән бейәнең тоҡомон һаҡлап ҡалырға тырыша?
- Ҡайһы атты ул үҙенең һамаҡтарын әйтеп һуғышҡа оҙата?
- Шырмый, шепшә тип кемдәргә әйтәләр?
- Мөхәмәтулла бабай ҡайһы төркөмгә ҡарай?

2. Төркөмдәр менән эш.

1-се төркөм. Мөхәмәтулла бабайға ҡылыҡһырлама бирә.

2-се төркөм. Ниндәй кеше ул Ҡотлогилде? тигән һорауға яуап бирә.

3-сө төркөм. Әҫәрҙең төп темаһы нимә?

3. Әҫәр буйынса йомғаҡлау.
Аттың ҡәҙерен белеү өсөн уны бөтә күңел менән яратырға кәрәк. Мөхәмәтулла бабай тап шундай кеше. Ул Ерән бейәнең тоҡомон Абдрахман батырҙың ат тоҡомо тип иҫәпләй. Ысынлап та атһыҙ башҡорт, ул ҡанатһыҙ ҡошҡа тиңләнгән. Башҡорт халҡы тураһында ниндәй генә әҫәрҙе алһаҡ та ат эпизоды бар.
( Китаптар, картина менән таныштырып үтеү, «Эйәрле ат» йырын тыңлау.
4. Ат тураһында тағы ла нимәләр беләһегеҙ икән, әйҙәгеҙ, көс һынашып ҡарайыҡ.
1-се төркөмгә эш.
Мәҡәлдәрҙең яртыһын тап.
- Аттан ала ла тыуа, …(ҡола ла тыуа)
- Ат туйған ерендә, …(Ир тыуған илендә)
- Ат – тауҙа, …(егет яуҙа һынала)
- Ағай-эне талашыр, …(атҡа менһә ярашыр)
- Яман атты ял баҫыр, …(яман илде яу баҫыр)
- Ат дағаһыҙ булмаҫ, … (батыр яраһыҙ булмаҫ).
2-се төркөмгә эш.
Йомаҡтарҙың яуабын әйт.
-Һыуға төшһә мең, һыуҙан сыҡһа –бер.
-Ике яғы бимаҙа, уртаһында һи-һа-һа.
-Бер ай аҫтында алты йондоҙ.
3-сө төркөмгә эш.
Ат егеү өсөн нимәләр кәрәк һанап сығырға.
5. Ҡайһы төркөм етеҙерәк. Ат тоҡомдары буйынса кроссворд тултырырға.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | ***Е*** | | | |
| | | | | ***Р*** | | | |
| | | | | ***Ә*** | | | |
| | | | | ***Н*** | | | |

| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | ***Ҡ*** | | | | | |
| | | | ***А*** | | | | | |
| | | | ***Ш*** | | | | | |
| | | | ***Ҡ*** | | | | | |
| | | | ***А*** | | | | | |

(ерән, бурыл, бүртә, көрән, аҡбуҙ, алмасыбар, ҡашҡа, ҡола, ала).

IV. Йомғаҡлау.
- Бөгөнгө көндә ат ни өсөн кәрәк? Ат тураһында нимәләр белдегеҙ?

Төркөмдәргә баһалар ҡуйыу.